

*Урал МЫРҘАБУЛАТОВ,*
*квалификация күтәреү һәм кадрҙарҙың белемен камиллаштырыу факультеты начальнигы, эске эштәр хеҙмәте подполковнигы*

# Бәлә һорап килмәй

Рәсәй Федерацияһы Эске эштәр министрлығының хәрби резервы булараҡ, Өфө юридик институтының шәхси составы, көндәлек уҡыу һәм хеҙмәт менән бергә, төрлө көтөлмәгән хәлдәрҙең эҙемтәләрен бөтөрөүҙә һәм зыян күргән, ҡазаға осраған кешеләргә ярҙам итеүҙә лә ҡатнаша.

Мәҫәлән, 1989 йылдың 4 июнендә иртәнге 5 сәғәт 30 минутта Рәсәй Федерацияһы Эске эштәр министрлығының Өфө юғары мәктәбенең шәхси составы тревога буйынса күтәрелде һәм 275 курсант һәм офицерҙар дүрт автобус менән Оло Теләк эргәһендә тимер юл фажиғәһе булған ергә юлға сыҡты, сәғәт иртәнге 7-лә улар килеп тә етте.

Был һәләкәт эҙемтәләрен бөтөрөүҙә ҡатнашҡан С.С. Аймағомбетов менән У.М. Мырҙабулатовтар шулай хәтерләй:

«Һәләкәт булған ерҙең уртаһына барып етә алманыҡ, сөнки тәрән соҡор ҡамасаулай ине. Йәйәүләп ҙур булмаған урман эсенән үттек һәм күҙ алдыбыҙҙа ҡот осҡос күренеш хасил булды. Булып үткән шартлауҙың ҡеүәтен һәм ҙурлығын бер нисә саҡрым буйына ағастарҙың баштары киҫелгән булыуына ҡарап та белеп була ине. Тирә-йүндәге үлән ҡара янған, ике поездың да составы икегә бүленгән, вагондары ҡабырғаларында ята. Күктә Өфө юғары авиация училищеһы летчиктарының вертолеттары геүләп оса. Бер нисә вертолет туп-

тура соҡор эсенә үк төшөп ултырған, ярым тере, янып-көйгән кешеләрҙе һаҡ ҡына күтәреп шунда ташыйҙар. Ошо ауыр йөктө тейәгән вертолеттар Өфөгә табан осоп китә, улар урынына икенселәре килеп төшә.

Һуңынан беҙ был ҡот осҡос фажиғәнең сәбәптәрен белдек: тимер юл эргәһенән үткән газүткәргес шартлап, унан сыҡҡан шыйыҡ газ тимер юл аҫтында ятҡан соҡорға йыйылған булған. Тап ошо ике поезд үтеп барғанда ғына, газ тоҡанып китеп, көслө шартлау булған. Бик күп кеше һәләк булды унда. Был һәләкәткә дусар ителгән кешеләр өсөн тамуҡтың үҙе шул булғандыр...»

Курсанттар һәм офицерҙар төшкә тиклем тимер юл буйынан һәләк булғандырҙы, яралыларҙы махсус билдәләнгән урынға ташыуҙа ярҙам күрһәтте, уларҙың документтарын эҙләп табыштылар.

Төштән һуң күпселек курсанттар приказ буйынса Өфөгә ҡайтып китте, ә подполковниктар В.И.Роличев һәм Т.С.Хәкимов (әле улар икеһе лә отставкалағы полковниктар, институттың ветерандары) етәкселегендә 66 кеше һәләкәт булған ерҙе һаҡлап ҡалды.

Артабан курстанттар һәм офицерҙар тағы өс көн буйы һәләкәт зонаһында эҙләнеүҙәрҙе дауам итте, һөҙөмтәлә ядро шартлауы тип ҡурҡып был ерҙән ҡасырға тырышҡан тағы бер нисә пассажир табылды.

5 июндә бер төркөм курсанттар Өфөлә һәләкәткә тарығандарға ебәрелгән гуманитар ярҙамдың махсус йөктәрен бушатыуҙа ҡатнашты.

7 июндә иһә юғары мәктәптең бөтә шәхси составы дөйөм йыйылышта һәләкәткә тарығандарға ярҙам фондына үҙҙәренең бер көнлөк эш хаҡын күсерергә ҡарар итте. Бынан тыш курсанттар һәм офицерҙар шартлау ваҡытында яраланған кешеләргә донор ҡаны бирҙе.

Йәнә тағы бер миҫал. 1994 йылдың 13 марты, ял көнө ине. Иртә менән курсанттарҙы тревога буйынса уяттылар. Ял көнө булғас, күптәр быны шаярыу тип уйланы, икенселәре, ял көнө лә йоҡларға бирмәйҙәр, тип асыуланып алды. Әммә, күп тә үтмәй, был хәлдең һис кенә шаярыу түгеллеге асыҡланды: Благовещен ҡалаһында торлаҡ йорт шартлаған, кешеләр бәләгә тарыған.

Уҡыу йортонан 120 курсант һәм офицер фажиғә булған ергә юл тотто. Унда ҡатнашҡан Э.А. Вицке һәм Ф.И. Даниловалар былай хәтерләй:

«Фажиғә булған ергә килһәк, күп ҡатлы йорт шартлағанын күрҙек. Өйҙөң урталағы подъезы тулыһынса емерелгән, ә башҡаларында янғын дауам итә, кеше ҡайнаша, һәләк булғандарҙың туғандары, янғын һүндереүселәр һәм милиция хеҙмәткәрҙәре шартлау эҙемтәләре буйынса һорауҙарҙы асыҡлай ине. Курсанттарҙың бер өлөшө емереклектәрҙе таҙартыу, һәләк булғандарҙың кәүҙәләрен табыу эшенә тотондо. Емереклек аҫтында 11 кеше һәләк булғайны. Ҡалған курсанттар йорт тирәһендә тәртип һаҡлау бурысын үтәне...»

Благовещен ҡалаһындағы шартлау эҙемтәләрен бөтөрөүҙә ҡатнашҡан бөтә шәхси составҡа аварияла ҡотҡарыу эштәрен атҡарыуҙа оҫта эшләгәндәре һәм ҡуйылған бурыстарҙы намыҫлы үтәгәндәре өсөн мәктәп начальнигының приказы менән рәхмәт белдерелде.

1994 йылдың август айында Өфө юғары мәктәбенең 30 курсанты Белорет районының Тирлән ҡасабаһында быуа йырылыу эҙемтәләрен бөтөрөүҙә лә ҡатнашты.

Башҡортостан Республикаһы хөкүмәте баһалауынса, улар һәләк булғандарҙы табыу һәм ҡаза күргәндәргә ярҙам итеү буйынса ҙур эш башҡарған. Һәләкәт эҙемтәләрен бөтөрөүҙә ҡатнашҡан өсөн шәхси состав Башҡортостан Республикаһы хөкүмәтенең һәм Рәсәй Эске эштәр министрлығының юғары наградаларына лайыҡ булды.